**МУНИЦИПАЛЬ МӘКТӘПКӘСӘ БЕЛЕМ БИРЕҮ БЮДЖЕТ УЧРЕЖДЕНИЕҺЫ**

**БАЛА ҮҪТЕРЕҮ ҮҘӘГЕ – “АҠБУҘАТ” БАЛАЛАР БАҠСАҺЫ**

## Ата-әсәләр өсөн консультация

# Телмәр үҫтереүҙә

# бармаҡ уйындарының әһәмиәте



# Телмәр үҫтереүҙә
# бармаҡ уйындарының әһәмиәте

“Баланың мейеһе бармаҡтары осонда урынлашҡан” тигән фраза ябай метафора ғына түгел. Бармаҡтар ни тиклем күберәк күнегеүҙәр башҡарһа, улар шул тиклем аҡыллыраҡ булалар.

Бына шуның өсөн дә ғаиләлә, балалар баҡсаһында бала белем тауына тәүге аҙымдарын яһағанда бармаҡтар хәрәкәтен үҫтереүгә айырыуса иғтибар итеү кәрәк. Бармаҡ уйындары баланың ҡул мускулдарын нығытыуға, иғтибарын, хәтерен, фекерләү ҡеүәһен үҫтереүгә булышлыҡ итеү менән бер рәттән, телмәр үҫешенә лә ҙур йоғонто яһай.

Балалар баҡсаһында бармаҡ уйындары менән таныштырыуҙы кескәйҙәрҙән башлап бер нисә төркөмгә бүлеп ойошторола. Тәүгеһендә балаға әйләнә-тирәләге предметтарҙы, ҡоштарҙы, хайуандарҙы ҡул бармаҡтары менән күрһәтеү өсөн фигуралар тәҡдим ителә. Уларҙы яһағанда бөтә бармаҡтарҙың да ҡатнашыуы мотлаҡ. Фигураларҙы шиғырҙар, йомаҡтар, мәҡәлдәр, һынамыштар менән бәйләү баланың телмәрен үҫтереүгә булышлыҡ итә, ишетеү һәләтен камиллаштыра, ҡыҙыҡһыныуын уята.

Мәҫәлән бармаҡтар менән **куянды** күрһәтәйек. Бының өсөн сәтәкәй һәм сығанаҡ бармаҡтарҙы баш бармаҡ менән ҡыҫабыҙ. Һуҡ һәм урта бармаҡтарҙы өҫкә күтәреп ҡуяндың ҡолаҡтарын күрһәтәбеҙ.

Танышайыҡ, мин – ҡуян,
Урман эсендә оям.
Бары тик оямда ғына
Үҙемде батыр тоям. (Гөлфия Юнысова)

**Бесәйҙе** күрһәтеү өсөн урта һәм сығанаҡ бармаҡтарҙы баш бармаҡҡа терәп бесәйҙең моронон яһайбыҙ. Сәтәкәй һәм һуҡ бармаҡтар өҫкә күтәрелгән – ҡолаҡтар.

Бесәй, бесәй, бесәй шул,
Бесәй әле кескәй шул.

Үҙе мырлай ҙа мырлай

Әллә ул шулай йырлай.

**<u>Әтәс</u>**. Һуҡ һәм баш бармаҡтарҙы бер-береһенә терәйбеҙ. Башҡа бармаҡтарҙы өҫкә тарбаәтып әтәстең кикереген яһайбыҙ.

Ихатал ҙур әтәс,

Башында суҡлы кәпәс,

Күҙе мәрйендәй тере,

Үҙе йөрөй бик эре.  (Фәүзиә Юлдашбаева)

Шулай уҡ тауыҡ, эт, ат, кәзә, ҡаҙ,ҡош, кәмә, өй, тирмә һ.б.  бармаҡтар ярҙамында күрһәтергә була

Бала ҡул бармаҡтары ярҙамында айырыми фигураларҙы күрһәтеүҙе үҙләштергәс, ҙур булмаған әкиәттәрҙе сәхнәләштерергә мөмкин. Мәҫәлән “Шалҡан”, “Йомро икмәк”, “Тирмәкәй”, “Өс айыу” һ.б.

Өлкәнерәк балалар менән төҫлө таяҡсаларҙан төрлө фигуралар төҙөйбөҙ. Уйындың был төрөндә балалар төҫтәр менән бергә геометрик фигураларҙы ла ҡабатлаә. Шулаә уҡ пунктир һыҙыҡтарҙы тоташтырыук ҙа балалар өсөн бик файҙалы.

Ҡул хәрәкәтсәнлеген үҫтереү түбәндәге ҡағиҙәләр ярҙамында тормошҡа ашырыла:

- Баланы мәжбүр итергә ярамай, эште уға оҡшаған күнекмәләрҙән башлау кәрәк.
- Күнекмәләр даими ҡабатланырға тейеш.
- Баланың иғтибарын һәм ҡыҙыҡһыныуы тиҙ кәмей, шуға күрәдәрестәр 3 йәшкә тиклем ç минут итһә, артабан ваҡыт һәм уйындар күләме арта барабан ваҡыт һәм уйындар күләме арта бара.